*Рәлис УРАҘҒОЛОВ*

# Барыһы ла үҙебеҙҙән тора

Кешелек тарихында ниндәй генә халыҡ йәшәмәгән дә, ҡайһыһы ғына тарҡалып, яңыларын булдырмаған. Һуңғы ваҡытта бәғзе бер «аҡыллы» башлы әҙәмдәрҙән: «Башҡорт та бик боронғо халыҡ, беҙ ҙә ҡартаябыҙ, шуға ла үҙаң юғала, ассимиляцияға бирешәбеҙ», һымағыраҡ һүҙҙәр ишетелә башланы. Был — пессимистар фекере. Бөтмәйәсәк башҡорт, киреһенсә, яңы меңйыллыҡта сәскә генә атасаҡ. Эйе, мең йыллыҡ тарихыбыҙ, ошо тарихта ҡалдырған эҙебеҙ бар. Юлыбыҙҙа төрлө саҡтар — артҡан, кәмегән, боларған, үләттән ҡырылған һ.б. — булған, ләкин был әле ясин уҡыуға сәбәп түгел, кире аяҡҡа баҫҡанбыҙ. «Башҡорт» исеме аҫтында берләшкәнбеҙ. Ҡайһылыр халыҡ тарихтан киткән икән, һис тә ҡартайған өсөн түгел, тик «сир»ен йәшергәне арҡаһында ғына. Минеңсә, ауырыуҙарынан арына барған халыҡ ҡына оҙаҡ йәшәй ала. Беҙгә лә ауырыйбыҙ тип әйтергә ваҡыт. Тик аяҡтан йығылыр өсөн түгел, ә дауаланыр өсөн кәрәк был. Уның дауаһы үҙҙәрен табиплыҡҡа тәҡдим итеүселәр ҡулында түгел — үҙебеҙҙә генә.

Әлеге мәҡәләмдә ошо хаҡта уйланып, халҡыбыҙҙың елеген һурыусы нәмәләр тураһында фекерҙәрем менән уртаҡлашырға ҡарар иттем.

### Аҡланыу, зарланыу

Аҡланыу — халҡыбыҙҙы ялмап барған иң ҡурҡыныс ауырыуҙарҙың береһе. Сөнки ул эскелек һымаҡ күренеп килмәй, эстән кимерә, кешене иле, халҡы яҙмышына битараф яһай. Сиргә дауа эҙләр урынына әҙәм балаһы кәмселектәренә яуап (аҡланыу) тапҡан була ла тыныслана. Шулай итеп, ул физик яҡтан да бигерәк рухи яҡтан ҡыйратыла. Әлеге «аҡланыу» тигән ҡорт халыҡтың үҙаңын тарҡата, зарланыуҙы булдыра.

Бөгөн күбебеҙ аҡлана: колхозсылар үҙҙәренең ярлы йәшәүен колхоздың аҡса түләмәүе менән аңлата, түшәмгә төкөрөп ятыусылар эш юҡлыҡҡа зарлана, хужалыҡ етәкселәре яңыса йәшәй алмауҙарын кассала аҡса юҡлыҡҡа, кешеләрҙең эшкә ҡарашы үҙгәреүенә һылтай. Ә бит бөгөн, нәҡ бөгөн халыҡтың киләсәге хәл ителә.

Иҡтисади хәлебеҙҙе һуңғараҡҡа ҡалдырып торайыҡ та, халыҡты халыҡ иткән тел мәсьәләһенә ҡайтайыҡ. Был бик сетерекле, шул уҡ ваҡытта хәл итмәҫлек проблема түгел. Һуңғы йылдарҙа республикала ул йәһәттән күп эштәр башҡарыла. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хөкүмәт кенә атҡарып сыға торған эш түгел ул. Әлеге лә баяғы, һәр ҡайһыбыҙға, үҙаңыбыҙға бәйле.

Редакцияла эшләгәс, ҡайһы саҡта ғалимдарға, яҙыусыларға, артистарға йомош төшкөләй. Телефондан шылтыратабыҙ. Теге яҡта телефон трубкаһын алалар: «Вам кого?» «Фәлән-фәләнович өйҙәме?» «Да. Паап, тебя зовут», йәки: «Де-еда, к телефону». Үкенесле, әммә был ысынбарлыҡ. Ә иң үкенеслеһе һәм аянысլыһы: үҙҙәре яҙған әҫәрҙәрҙе балаларының да, ейән-ейәнсәрҙәренең дә уҡымауы. Ошонда һорау тыуа: ағай-апайҙар, кем ғәйепле һуң балаларығыҙҙың һеҙҙең менән дә туған телегеҙҙә һөйләшмәүенә? Яҡынса яуап ошо: балалар баҡсаһы, мәктәптәр... Ләкин, ниндәй генә тоталитар системала йәшәмәйек, береһе лә өй эсендә туған телдә һөйләшеүҙән тыйып йөрөмәне. Был — аҡланыу!

Республикала телдең дәүләт статусына эйә булыуы шатлыҡлы.

Лəкин ул тел тəүҙə «ғаилə статусы»-на ла эйə булырға тейеш. Йыш ҡына был йəһəттəн мин үҙебеҙҙе сиғандар, Ҡырым татарҙары, бар донъяға таралған йəһүдтəр менəн сағыштырып ҡарайым. Булмаһа, сиғандарҙы — аҙ һанлы халыҡты алып ҡарайыҡ. Юғиһə, йыш ҡына битарафлығыбыҙҙы «аҙ һанлыбыҙ» тип аҡлайбыҙ. Ҡайҙа һуң сиғандарҙың «арбаһы»нан башҡа дəүлəте, ҡайҙа гаранттары булған президенттары, гимны, флагы, ҡайҙа дəүлəт теле? Юҡ. Бəлки, йəшəү дəүерҙəрендə булмаҫтыр ҙа. Лəкин был халыҡ тарихтан тиҙ генə юғалмаясаҡ, сөнки сиғанды халыҡ итеүсе, нигеҙен һаҡлаусы инештəре ҡоромаған.

Йəһүдтəр, чечен, ингуш, Ҡырым татарҙарының да милләтте һаҡлау саралары бар: тик үҙ милләттəшенə генə кейəүгə сығыу, өйлəнеү, ғаилə татыулығы өсөн тотош ырыуҙың яуап биреүе, бер-береңə ярҙам итмəүҙең, ғаилə тарҡатыуҙың иң ҙур хурлыҡ һаналыуы... Шуныһы иғтибарға лайыҡ: араларына береһе лə үҙ закондары менəн тығыла алмай!

Беҙҙең иһə ул шишмəне «лəм» баҫа башлаған. Шуға ла башҡа «сүп-сар» ҡушылып, шишмəне быуа бара. Халыҡ тигəн оло йылғаға саф һыулы, йылғаны һуғырып тороусы үҙ инеше кəрəк. Үҙ шишмəһе быуылған йылға, ямғыр һыуҙарына өмөтөн бағлап, сарсай, нисек тə һаҫығыһы, һайыҡҡыһы килмəй. Үҙ шишмəбеҙ быуылғас, илдəге һəр үҙгəреш башҡа һуғып үтə, төрлө тəжрибəлəр ҙə һеңгеҙəтə...

Чечен, ингуш, Ҡырым татарҙары һымаҡ халыҡтарҙы 44-се йылда депортацияланылар, илдəренəн һөрҙөлəр. Ун өс йылдан аҡланылар ҙа, улар кире үҙ ерҙəренə ағылды, республикаларын тергеҙҙе һəм тергеҙə. Ə беҙгə депортация кəрəкмəне, яңғырауыҡлы лозунгтар ҙа етте: һуғыштан һуң Мəскəүҙе төҙөргə киттелəр ҙə шунда тороп ҡалдылар, аҙаҡ сиҙəм ерҙəр буйлап һибелделəр, БАМ, береһенəн-береһе удар башҡа төҙөлөштəр ҙə һөлөктəй йəш ҡыҙҙарыбыҙҙы, егеттəребеҙҙе меңəрлəп йотто. Бик-бик һирəктəре генə кире əйлəнеп ҡайтты...

Ə бит чечен, үзбəк, əрмəн, əзербайжандарҙың да үҙҙəрендə эш юҡ — Рəсəйгə сығып аҡса эшлəйҙəр ҙə кире нигеҙҙəренə ҡайталар. Ғаилəлəрен үҙҙəренең республика бюджеты ла ҡарай, үҙəк тə, ирҙəре иһə ошо уҡ Рəсəй халҡына тейешле аҡсаны ла тыуған яғына оҙата. Шунан һуң ҡайһы халыҡ бай йəшəргə тейеш?

Ҡайһы бер кеше: «Һəр милләттең үҙ үҫеш юлы, психологияһы, ниңə башҡортто шул уҡ сиған, йəһүд менəн сағыштыраһығыҙ?» тиер, һəм ихтилалдарҙа ҡырылыуыбыҙға ишара яһар. Дөрөҫ, башҡорт ғүмер буйы азатлығы өсөн баш күтəреп ҡырылған, тағы аяҡҡа баҫҡан. Тик, ҡайһы халыҡ һуң ҡаршылыҡһыҙ ғына формалашҡан, ер биләгəн, илмəмлəкəтен төҙөгəн?!

Тəбиғəт көсһөҙ һəм көслөлəрҙəн тора. Кешелеккте лə был ҡанун урап үтмəй. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, əҙəм уны үҙенсə аңлай. Шуға ла күп һанлылар, тимəк, көслөлəр, башҡаларға ла үҙ туҡһанын туҡһан иттерергə тырыша, халыҡ-ара нормаларҙы ла, дөйөм кешелек ҡанундарын да һанға һуҡмай. Ғөмүмəн, Ер йөҙөндəге һəр халыҡ ҡаршылыҡтарҙы еңə барып ҡына үҙ йөҙөн һаҡлап килə. Быға инде, əйткəнемсə, тик үҙ инештəре, халыҡ булып формалаштырған үҙ сығанаҡтары ғына булышлыҡ итə.

«Аҡланыу» вирусының тамырҙары бик тəрəндə ята. Моғайын, ул Башҡортостанға үткəрелгəн колониаль сəйəсəт менəн бергə индерелгəндер. Азатлыҡҡа һыуһаған халыҡтың ир аҫылдары ер-һыуын һаҡлап, динен яҡлап яуҙарҙа башын һалһа, ҡалған өлөшө ғаилəлəрен, мал-мөлкəтен, үҙенə тейешле генə булһа ла ерен алып ҡалыр өсөн аҡланыуға барырға мəжбүр булған. Быуын һайын бола, ихтилал ҡупҡан: кемдер башын һалған, кемдер тағы илəктəн иләнеп, «гəйептəрен» «таныр» өсөн аҡланған. Яйлап аҡланыу ҡанға һеңгəн, нəҫелдəн нəҫелгə күскəн. Ауырыуҙың иң ныҡ таралған мəле совет осоролор. Тəүҙə ҡыҙылдар менəн аҡтар буталышында ни эшлəргə, ҡайһы яҡҡа барырға белмəгəн халыҡ һыналған алымды ҡулланған. Коллективлашыу осоронда яҡлаулығы арҡаһында хəйерсе хəленə ҡалған əҙəмдəр йолҡошлоҡтарын аҡларға сəбəп тапҡан. 1937 йылдағы, һуғыш һəм унан һуңғы осорҙағы мəхшəргə инде бер килке халыҡ ҡатламы тамам оҫтара: кем башҡалар өҫтөнəн шикəйəт яҙып өлгөрə — шул «аҡла-

на». Хатта баҫыуҙа ҡалған арыш, бойҙай башағын алып ҡайтҡан йәтим балаларҙы ултыртҡанда ла мәкерлектәрен «халыҡ мөлкәтен урлаусылар менән көрәш» тип аҡлайҙар.

Бөгөн аҡланыу зарланыуға күсә башланы. Был вирус донъя көтөргә сәме булғандарға ла йоҡторола. Ауырыуҙың тәүге билгеһе — үткәндәрҙе һағына башлау. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күбебеҙ шулай йәшәй: вәт, элек колбаса, араҡы осһоҙ ине, тегеләй ине, былай ине...

Аҡланыуҙың, зарланыуҙың дауаһы ябай ғына: һәр яңылыҡтың, насармы-яҡшымы, ҡулай яғын файҙаланып ҡалыу, хаталарҙан һығымта яһарға өйрәнеү.

## Бер-беребеҙҙе батырабыҙ, көнләшәбеҙ

Был ауырыу ҙа беҙҙә борондан килә. Шүлгән менән Уралға ла, ханлыҡ өсөн көрәшеүсе ҡәрҙәштәр ығы-зығыһына ла, атай малын бүлешә алмаған башҡа «ваҡ-төйәк»тәргә лә туҡталып тормайыҡ. Тик бер генә һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ.

Башҡорт ере бик ҙур. Йыш ҡына тарихыбыҙға күҙ һалабыҙ ҙа иҫебеҙ китә: күпме ихтилалға күтәрелгән халыҡ, күпме аҫыл ир-азаматтар ҡырылған. Яңы башлыҡ ҡалҡып сыҡҡан, тағы яуға күтәрелгәндәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, етәкселәрен дә, әүҙем ҡатнашыусыларын да тота барғандар, язаға тарттырғандар. Шундай һорау тыуа: нисек итеп икһеҙ-сикһеҙ башҡорт ерендә Салауатты, Бәпәнәйҙе, Алдарҙы һәм башҡа бик күп ихтилал башлыҡтарын тота алдылар икән? Ә бөгөн килеп, тотош Рәсәй армияһы, Эске эштәр органдары, ФСБ, «спецназ» бәләкәй генә Чечняла ялан командирҙарын тота алмай. Яуап бер: башҡорттоң ихтилал етәкселәрен йә башҡорт үҙе тотоп биргән, йә тоттороштан. Беҙгә ғәйепте башҡа халыҡтың йәлләдтәренә ташлауҙан туҡтап, күптән хаталарҙы үҙебеҙҙән эҙләргә, фәһем алырға ваҡыт.

Һүҙемде дәлилләп, миҫал килтергә килә. Ваҡытында төрлө ойошмаларҙа эшләргә тура килде. Улар араһында саф башҡорт коллективтары ла булды, төрлө милләт кешеләренән торғаны ла. Шуныһына иғтибар иттем: һуңғыһында мөнәсәбәт дуҫлыҡ мөхитенә ҡоролоп, хеҙмәткәрҙәр ниндәйҙер төркөмдәргә бүленмәгәйне. Ләкин, нисек кенә ҡыҙғаныс булмаһын, башҡорттар ғына эшләгән коллективта төркөм-төркөм булып йәшәү, тарҡаулыҡ, тыштан ялтырап, арттан һүҙ, ошаҡ йөрөтөү үҙен нығыраҡ һиҙҙерҙе. Ул тулыша-тулыша ла, һис кәрәкмәгән бер минутта (коллектив бер йоҙроҡ һымаҡ булырға тейеш ваҡытта) «шартлап» ярыла. Коллектив, дөйөм алғанда, халыҡтың кескәй генә тупланмаһы, килеп тыуған хәл алдында көсһөҙ ҡала. Тик алда телгә алған аҡланыу, кемгәлер зарланыу, ошаҡ һәм дә берберендә аҫҡа һөйрәү, батырыу, ҡара һөрөмдәй көнләшеү генә тороп ҡала. Һөҙөмтәлә, ул сир тотош халыҡҡа күсә, тарҡаулыҡтан файҙаланыусылар ҙа табыла.

Беҙҙең халыҡта «Башҡорт түрә булһа, сабатаһын түргә элә» тигән әйтем бар. Йылдар аша һыналып килгәнгә күрә оҙаҡ йәшәйҙер ҙә, бөгөнгө көнгәсә аҫылын да юғалтмағандыр ул. Ысынлап та, күп осраҡта шулай килеп сыға ла: ябай ғына колхозсы бригадир булып алһа, үҙе менән эшләгән кешеләрен танымай башлай, хужалыҡ рәйесе алмаш әҙерләмәй, район кимәленә сыҡһа, ауылдаштарын артынан һөйрәмәй, мәктәп уҡыусыларын юғары уҡыу йорттарына индереү яғын уйламай һ.б. Һөҙөмтәлә, күпселек колхоз-совхоздарҙа етәкселәр урындан сыҡмаған. Әлбиттә, «теге» йылдар сәйәсәте лә шулайыраҡ ине — етәкселәрҙе ситтән килтереп ҡуйыу. Ләкин барыбер күп нәмә халыҡтан торҙо.

Халыҡ, әлеге урындағы түрәләрҙән ниҙер өмөт итеүселәр, уларҙы «кеше итер» өсөн ни эшләне һуң? Дөрөҫөрәге, бер ни ҙә. Ул меҫкен дә үҙ көсөнә генә ышанып уҡырға барып кергән, тырышып-тырмашып уҡыған, диплом алған, ҡайтып, йә агроном, йә ябай зоотехник, инженер булған. Беребеҙ ҙә уны күрмәйбеҙ, беребеҙ ҙә үҫтереү яғын ҡарамайбыҙ: «Йәш әле, тәжрибәһеҙ әле; шуның балаһынан буламы ни ул», — тибеҙ. Һәм ул берәй вазифаны «яулап» алһа, шәйләй башлайбыҙ, өҫкәрәк күтәрелһә, теге кәрәк ине, был кәрәк ине, тип йүгерәбеҙ, теңкәһенә тейәбеҙ. Бирмәй икән, үҙебеҙ аҫҡа һөйрәй башлайбыҙ.

Көнләшеү ике төрлө була: береһен «сәм» тиһәң дә ярай. Ошо сәм кешене йәшәтә, башҡаларҙың яҡ-



04.2002 2 ÷àñòü.p65 162 29.07.02, 17:42

шы яғынан көнләштереп, һоҡландырып, үҙенде лә шулар артынан эйәртә, уларҙан уҙҙырып ебәртергә тырыша. Ләкин тағы береһе бар, урыҫтар уны «черная зависть» тиҙәр. Ошо көнләшеү харап итә лә күптәрҙе. Зыялылар, халыҡтың йөҙөк ҡашы булырҙай кешеләр араһындағы көнләшеү айырыуса йөрәкте өйкәй. Беҙҙең арала булған тар күңелле ҡара эсле кешеләрҙең һүҙенә ҡолаҡ һалыу һағайта. Аҫтыртындар һүҙен өҫтөн ҡуйғандар икән, тимәк, уларға йәшәүгә көс биргәндәр тигән һүҙ бит. Был — бәлә!

Кәмселектәрҙән ҡотолоуҙан, әлбиттә, дауа бар. Ул да булһа — иғтибарлыҡ, төшөнкө рух таратыусыларҙы, кеше һүҙен (ләстит), ошаҡ йөрөтөүселәрҙе, коллективты болғатыусыларҙы урынына ултыртыу. Быны өсөн көслө, аҡыллы, белемле йәштәр теҙгенде ҡулына алырға тейеш.

### Бар ул идеология, бар!

«Пионер, комсомол ойошмалары тарҡалғас, йәштәр менән эшләүсе органдар юҡ. Илдә демократия башланғас, идеология бөттө. Шуға ла йәштәр ҡайҙа барырға белмәй, ялын, буш ваҡытын үткәрергә урын юҡ. Наркомания, токсикоманияға ылыға башланылар...»

Һуңғы ваҡытта бик йыш ишетелә бындай һүҙҙәр. Хатта абруйлы журналистар, яҙыусылар ауыҙынан да ишетергә, мәҡәләләрен уҡырға тура килә. Буш һүҙ улар! Комсомол, пионер ойошмалары дөйөм кешелектең тәрбиә алымдарын оҫта файҙаланып, балалар аңына коммунизм идеяһын мәжбүри һеңдерҙе генә. Уның ҡарауы, бар халыҡтарҙы ла тамырынан, йолаларынан, дине, йәшәү рәүеше, булмышынан айырҙы. Үҙ тамырҙарынан алыҫ торғас, инештәренән һыуһынды ҡандырмағас, йәш быуын яһалма сит мөхит йоғонтоһонда ҡалды.

Бөгөн идеология бар — халыҡты килеп тыуған көрсөктән сығарыу; хәйерселек, башта буталған икелемикеле уйҙарҙан арындырыу; ерҙәренә хужа булдырыу; баҙар шарттарында йәшәргә өйрәтеү; шул уҡ ваҡытта милләтебеҙҙе милләт иткән тамырҙарыбыҙға әйләнеп ҡайтыу.

Һуңғы ваҡытта колониаль сәйәсәткә ҡаршы күтәрелгән ата-бабаларыбыҙ ихтилалдарының аяуһыҙ баҫтырылыуы, халыҡтың меңәрләп-меңәрләп ҡырылыуы, ҡоллоҡҡа һатылыуы тураһында байтаҡ хеҙмәттәр яҙылды, эленән-әле әҙәби әҫәрҙәр баҫылып тора. Был бик хуп эш. Ләкин, беҙ теләйбеҙмеюҡмы, уның кире яҡтары ла бар: «Ата-баба ғүмер буйы баш күтәреп болаларҙа, ихтилалдарҙа ҡырылған, бөлгөнлөккә төшкән, беҙ ғүмер буйы иҙелгән халыҡ инде», тигән психология ла тыуҙырыла. Тарихи хеҙмәттәр менән бер рәттән, халыҡҡа башҡа параллелдәр ҙә үткәрелергә тейеш: «башҡорт бахыр түгел — батыр; яуға ғына күтәрелеп ҡалмаған, эшләй ҙә, бай ҙа йәшәй алған, үҙ еренә хужа ла булған, белемгә ынтылған; уның ҡанында, «тәбиғәт балаһы» булыуҙан тыш, эшҡыуарлыҡ та бар; бер-береһенә ярҙамсыл булған һәм әле лә гендарҙа ул һаҡлана...» Ғөмүмән, бер сиктән икенсеһенә һуғылырға ярамай, һәр яҡлап дипломатик ҡараш кәрәк.

### Бала бағыу — милләт бурысы

Ниһайәт Рәсәйҙә демографик хәлдең ҡырҡыулашыуы тураһында һүҙ ҡуҙғаттылар.

Күренекле урыҫ яҙыусыһы А.Солженицын фаразлауынса, илдә йыл һайын миллионлап кеше кәмей. Быны башҡа сығанаҡтар ҙа дәлилләй. Рәсми рәүештә 144 миллион тип иҫәпләнһәк, тағы ун йылдан 134 миллионға ҡалыуыбыҙ ихтимал. Төп сәбәптәр булып тыуымдың аҙ булыуы, халыҡтың «ҡартайыуы», авария, һуғыш, наркомания, эскелек тора. Ҡатын-ҡыҙҙың һаулығы насарайыуы ла төп сәбәптәрҙең береһе. Түлһеҙлек мәсьәләһе киҫкен. Рәсәйҙәге бөтә парҙарҙың 15 проценты — түлһеҙ. Кешелекте дауам итер өсөн һәр ғаиләгә — ҡатынға 2,25 бала тура килергә тейеш булһа, Рәсәйҙә ул 1,23 кенә. Түлһеҙлектең төп сәбәбе (40—50 процент) — аборт, енси бәйһеҙлектән килгән ауырыуҙар. Тимәк, ҡайһы халыҡта былар ға юл ҡуйылмай (дин, ғөрөф-ғәҙәт, йола буйынса), ҡатын-ҡыҙҙың уның менән ауырыуы шул тиклем аҙыраҡ.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, демографик хәл беҙҙә лә шатландырырлыҡ түгел. Профессор, Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы депутаты

В.Сәхәүетдинов «Башҡортостан» гәзитендәге (18 август, 2000 й.) бер мәҡәләһендә былай тип яҙғайны: «Беҙ, медиктар, күптән инде һаулыҡ индексының ахыр сиккә етеп кәмеүе тураһында оран һалабыҙ. 80 процент ауырыу ҡатын-ҡыҙҙар шулай уҡ ауырыу бала таба икән, ҡайҙа табан барабыҙ һуң беҙ? Тарих белә, әгәр ҙә ғаиләлә ике бала үҫһә, халыҡ, ни тиклем генә күп булмаһын, 120-150 йыл дауамында юҡҡа сыға, ғаиләләрҙә берәр бала булғанда бының өсөн 75-100 йыл да етә! «Донъя Рәсәйҙең юҡҡа сығыуын һиҙмәй ҙә ҡаласаҡ...» тигән фекер дөрөҫкә сығып ҡуймағайы...»

Өфөнөң сәнәғәт зонаһында йәшәүсе, йөклөлөк буйынса иҫәпкә алынған ҡатын-ҡыҙҙарҙың 48 процентында — анемия, 16 процентында бөйөр ауырыуҙары асыҡланған. Балаларҙың иммун системаһы тотороҡһоҙ, күп ағзалары формалашып бөтмәгән. Бер йәшкә тиклемге балаларҙа тын алыу ағзалары ауырыуҙары өҫтөнлөк итә, тыумыштан зәғифлек, нервылар системаһы, аш һеңдереү ағзалары ауырыуҙарының артыуы күҙәтелә.

Беҙҙең республика балаларында ашҡаҙан-эсәк юлы, ҡан һәм ҡан әйләнеше ауырыуҙары (2,6 тапҡырға), нервылар системаһы һәм һиҙеү ағзалары ауырыуҙары (1,4 тапҡырға), эндокрин һәм бәүел-енес системаһы ауырыуҙары (1,2 тапҡырға) йышыраҡ осрай.

Республикала балалар ауырыуҙарының хроник формалары үҫеше күҙәтелә.

«Труд» гәзите (27 август, 1998 й.) Рәсәйҙә етемдәр һаны артыуына борсолоу белдергәйне. Психик һаулыҡ үҙәге мәғлүмәттәрендә таянып, ҡот осҡос һандар баҫылды. Илдә ошо йылға 400 меңдән ашыу етем булһа, шуның 95 процентының ата-әсәһе иҫән. 1997 йылда Мәскәүҙә 350-нән ашыу әсә тыуған сабыйынан баш тартҡан. Һәр йыл һайын ошо тиклем үк сабыйҙы ырғытып (кеше тупһаһына, юлға), үлтереп, сүп контейнерҙарына, торба үткәргестәргә һ.б. ташлайҙар. Балаһынан баш тартҡан ҡатындарҙың 49 проценты 15-19 йәшлектәр. Тик 18 процентының ғына ауырға ҡалғансы эш урыны булған.

Бында аборттар һаны инмәй. Тик донъяла уның буйынса Рәсәй икенсе урынды биләүе күп нәмә тураһында һөйләйҙер. (Әйтергә лә ҡурҡыныс, илдең ҙур ҡалалары сит илдәргә төрлө биҙәнеү әйберҙәре, көслө дарыуҙар яһау өсөн аборттан һуң алынған яралғыларҙы контейнерлап оҙатып тора!) Башҡортостанда ғына ла йылына 60 меңләп (!) аборт яһала.

«Башҡортостанда һуңғы ваҡытта йылына 14-15 мең ғаилә тарҡала. Биш йыл эсендә генә лә 71197 ғаилә тарҡалған, йәғни никахҡа инеүселәрҙең яртыһынан күберәге. Йыл да 8-9 мең кешенең никахы теркәлә (күпселеге ирҙәр). Был совет өлгөһөндәге күп никахлыҡ һәм уның иң насар өлгөһө. Сөнки РФ Енәйәт Кодексында күп никахлыҡ өсөн яза ҡаралмаған, ә ташландыҡ ғаилә хоҡуҡтары сикләнгән. Тап уларҙың мәнфәғәтендә күп ҡатынлылыҡ тураһында закон ҡабул итеү кәрәк тип һанайым... Был йәһәттән Ингуш Республикаһы үҙ халҡының тамырҙарына, асылына ҡайтырға рөхсәт бирҙе. Бала бағыу тотош милләт бурысы шул.

Һуңғы биш йылда айырылышҡан ғаиләләрҙә 71 меңдән ашыу бала атайһыҙ ҡалған. Ошоға 33022 никахһыҙ әсәйҙән донъяға килгән сабыйҙы өҫтәгеҙ. Үкһеҙ етемдәрҙе, ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителгән балаларҙы ҡушһаҡ — 130 мең сабый.

### Буйҙаҡлыҡ, кейәүгә сыҡмау

«... Әҙәм балалары әсәнән яртышар ғына булып тыуа. Аяҡ-ҡулдары бөтөн, башы-күҙе төҙөк көйө донъяға ҡабул итәм мин кешене, ә үҙемдең эстәрем өҙөлә. «И, бахырҡайым, үҙ яртыңды табырһыңмы икән? Тапһаң ғына ярар ине», тим. Табышмаһалар, күктәге анау бихисап йондоҙҙар кеүек йымылдашып, ғүмер буйы бер-береһен эҙләп йөрөй бисара бәндәләр. Уларҙы ҡушырға, күрәһең, Хоҙайҙың да ҡөҙрәтенән килмәйҙер. Ҡөҙрәтенән килһә, йыһан буйлап аҙашып йөрөгәндәр шул тиклем күп булмаҫ ине...» Шулай әсенә Мостай Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәрендәге ауылда кендек әбейе булып йөрөүсе Оло инәй.

Кендек әбейе, бабасы, яусы... Был һүҙҙәрҙе, тырыша торғас, асылы менән бергә тарих сүплегенә сығарып түктеләр, ахыры. Тик бергә халҡыбыҙҙы йәшәтеүсе та-



04.2002 2 ÷àñòü.p65 164 29.07.02, 17:42

мырҙың нескә ҡылдары ла өҙөлдө, үҙәктәре ҡаҡшаны. Уйлап ҡараһаң, күпме көс йәлеп ителде: «иҫкелек ҡалдығы»н һепереп түгеү өсөн тотош институттар, уҡыу йорттарында, мәктәптәрҙә программалар төҙөлдө, әҙәбиәт һ.б. эшкә егелде.

Һәр халыҡ борондан үҙенең йәшәйешен төрлө юлдар аша хәл иткән. Шуны аңларға кәрәк, бер халыҡтыҡы икенсеһенән ҡырҡа айырыла. Сөнки сығыштарыбыҙ төрлө, төрлө тәбиғәт шарттарында йәшәйбеҙ һ.б. Уларҙы тулыһынса аңлар өсөн тик ошо милләт вәкиле булып тыуырға кәрәктер. Юғиһә, «оло ағай» мөнбәренән ҡарап ҡына фекер йөрөтөүсәнбеҙ, уларҙың беҙгә ят нәмәләрен дә үҙебеҙгә күсерергә тырышабыҙ. Һәр халыҡтың уртаҡ нәмәләре менән бергә, һыйышмағандары ла була. Һәм улар һәр кемдең үҙенеке генә булырға тейеш тә. Нәҡ ошо «үҙенеке» булмаһа, халыҡ йәшәүҙән туҡтай, ят нәмәләргә иммунитеты булмайынса, ул башҡаның сире менән ауырый башлай.

Башҡорттоң да үҙенә генә хас ғаилә институты (тимәк, артабанғы йәшәйеше) бар.

Ғаилә ҡороуҙа борондан яусы, димсе ҙур роль уйнаған. Егет нәҫеленең абруйлы аҡһаҡалы, ил инәһе булған. Йыш ҡына буласаҡ кейәүҙең олатаһы ла яусы булып барған. Улар йәштәрҙең ата-бабаларының кемдәр булыуын, хатта нәҫелдән килгән ауырыуҙарына тиклем белгән. Буласаҡ ир менән ҡатынды ла ул бәләкәйҙән күреп-белеп йөрөгән. Йәштәр ғаилә ҡороп киткәс инде, димсе иң хөрмәтле кешеләрҙән иҫәпләнгән, тормош юлдарында яҡын кәңәшселәренә әйләнгән. Тәүгеләре татыу йәшәһәләр, димсенең дә кеше араһында мәртәбәһе артҡан.

Димләүҙә мөхәббәт шауҡымынан «иҫергән» егет менән ҡыҙ күҙлегенән сығып ҡына фекер йөрөтөлмәй, ә уның нигеҙендә нәҫел, тотош милләт мәнфәғәте ята. Тимәк, буласаҡ килендең, кейәүҙең кемлеге барыһын да борсолдора, сөнки йәштәр артабан ил алдында һәр береһенең намыҫына, исеменең сафлығына тап төшөрмәҫкә тейеш. Йәғни һәр кем улар яҙмышы өсөн ниндәйҙер кимәлдә үҙен яуаплы һанай. Йәштәрҙе иҫән-һау бергә йәшәтеү, ярҙам итеү, һуңыраҡ инде бала тәрбиәләү — башҡортта борондан «мир» эше һаналған. Шуға беҙҙә «нәҫел намыҫы», «ауыл намыҫы» тигән төшөнсә нығынған да инде. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, димселәр мәктәбе бөтөрөлгәс, исламдан тайпылғас, йәштәрҙең ҡауышыуы ла, айырылышыуы ла, хатта баланың ярты етем ҡалыуы ла шәхси эшкә әйләнде. Ике яҡ туғандар туй өҫтәле «туғандары», аҙаҡ иһә ситтән күҙәтеүселәр генә булып ҡала бара. Шулай уҡ яусыларға алмашҡа килгән шаһиттар ҙа «туй генералдары»на, йәғни туй мәжлесен алып барыусыларға ғына әйләнде. Никах кенәгәһе тапшырғанда ҡуйған ҡултамғалары исем өсөн генә. Ҡултамғалар шаһиттарға бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ өҫтәмәй. Димсе хәҙер ултырып ҡалған ҡыҙ менән 30-ҙы үткән егетте, тол ҡатын менән яңғыҙаҡ ирҙе генә таныштырыусы булараҡ күҙаллана.

Типһә тимер өҙөрлөк, гөрләтеп донъя көтөрлөк, тупылдатып бала һөйөрлөк ир-егеттең өйләнмәүе ысын фажиғә бит! Ғөмүмән, димләү йәшәһә, ике дуҫ ғаиләнең балаларын йышыраҡ аралаштырыу, дуҫлаштырыу ҙа тигән һүҙ.

Беҙҙә димселәр мәктәбе бөтөрөлһә лә, хәҙерге Урта Азия, Кавказ халыҡтарында ул бар. Хатта йәһүдтәрҙә лә ул ниндәйҙер дәрәжәлә (мәҫәлән, улдарын үҙ милләттәштәренә генә өйләндереү, ҡыҙҙарын кейәүгә биреү) йәшәй. Ошо ла, башҡа бик күп сәбәптәр менән бергә, аҙ һанлы милләттәрҙең күп һанлылар араһында юғалмауына килтерә, традиция үә йолаларын йәшәтә. Был йәһәттән Ингушетия Президенты Руслан Аушевтың «Труд» гәзитенә биргән интервьюһы фәһемле:

«— Рәсәйҙең юстиция министры Крашенинников һеҙҙең ҡарарығыҙ (республикала күп ҡатынлылыҡты индереү — Р.У.) Рәсәй Конституцияһына ҡаршы килә тип белдерҙе...

— Был мәсьәләгә ҡағылып һәйбәт эшләнек. Бәлки, ул федераль етәкселеккә лә, Рәсәй халҡына ла күп милләтле дәүләттә йәшәүҙәрен төшөндөрөр... Урыҫ кешеһе өсөн мөхәббәт буйынса никах ғәҙәти күренеш. Кавказда улай түгел. Минең уйымса, ингуштарҙың 5 проценты ғына мөхәббәт буйынса өйләнә. Беҙҙә никах — егет менән ҡыҙҙың ата-әсәләре килешеүе ул... Министр Крашенинниковтың беҙҙең милли ғө-



04.2002 2 ÷àñòü.p65 165 29.07.02, 17:42

рөф-ғәҙәт Рәсәй Конституцияһына ҡаршы килә тип белдереүе көлкө. Бәлки, ул, Конституцияға һылтанып, беҙгә нисек йоҡларға, нисек ашарға күрһәтмә бирер...»

«Беҙҙә никах — егет һәм ҡыҙҙың ата-әсәләре килешеүе ул». Башҡортта ла элгәре шулай булған. Ләкин ул, аңға һеңдерелгәнсә, ҡыҙҙы бер ҡартҡа көсләп кейәүгә биреү тигән һүҙ түгел. Ҡөрьән буйынса ла, йола буйынса ла никах алдынан ҡыҙҙан да, егеттән дә фәлән-фәләнде кәләш итеп алырға, фәлән-фәләнгә кейәүгә сығырға ризалығы бармы-юҡмы икәнлеге һорала. Ә «ата-әсәнең килешеүе»нә килгәндә, бер кеше лә үҙ балаһына насарлыҡ теләмәй. Борон халыҡта бала тыуғас та уның буласаҡ кәләше йәки ире тураһында ҡайғыртыу башланған. Ошонан сығып, айырым ырыуҙарҙа ҡолаҡ тешләтеү йолаһы йәшәгән, бишек, һырға туйҙары үткәрелгән. Быларға хәҙерге күҙлектән сығып ҡына иҫкелеккә, ҡырағайлыҡҡа, баланың иркен ауыҙлыҡлауға ҡараған һымаҡ ҡарарға ярамай. Кәрәк икән, ҡыҙ, малай йәки уларҙың ата-әсәһе бишек туйынан һуң үткәрелгән һырға туйында ла (ул балаларға 8-12 йәштә үткәрелгән), унан һуң да «килешеү»ҙе боҙа алған. Быларға оҙаҡ туҡталып тормайынса, уҡыусының иғтибарын билдәле тарихсы Әнүәр Әсфәндиәровтың «Башкирская семья в прошлом» тигән китабына йүнәлтер инем. Һәр кем унда тупланған документтар, тарихсының хеҙмәте аша был турала уҡып белә ала. Алдағы һүҙҙәремде дәлилләп, унан бер генә миҫал килтерәм. Мәҫәлән, Өфө өйәҙе Ҡобау ауылы башҡорто Ғәйнихаят Ғәббәсова 4 йәшендә Һарт-Наурыҙ ауылы башҡорто Абдулъяппар Абдулсаттаровҡа димләнгән булған. Әммә 18 йәше тулғас, 1847 йылда, уға кейәүгә сығырға ризалығын бирмәгән (67-се бит). Ҡыҫҡаһы, «ата-әсә килешеүе»нең асылы — егетте кәләшһеҙ, ҡыҙҙы ирһеҙ ҡалдырмау, сабыйҙа бала саҡтан уҡ үҙенең «яртыһы» барлығын тойҙортоу, малайҙарҙы — ир, атай, ғаилә башлығы, ҡыҙҙарҙы — тоғро ҡатын, уңған килен, һөйкөмлө әсә итеп тәрбиәләү.

Икенсе мәсьәлә — «ҡыҙҙар һымаҡ аҡыллы» малай үҫтерәбеҙ. «Ҡыҙҙар һымаҡ аҡыллы»ны үҙебеҙҙең тиктормаҫ «зимагур»ға өлгө итеп ҡуябыҙ. Шул юҫыҡтан ҡарап уҡытыусылар мәктәптә тәртибенән бер малайға «өлгөлө», икенсеһенә «ҡәнәғәтләнерлек» билдәһе ҡуя. Тик бер нәмәне аңларға теләмәйбеҙ, беҙ тиргәгән сабыйҙа үҙенең тыңдәше «аҡыллыраҡ» (иғтибар итегеҙ: тәртипле түгел) икән тигән фекер уяна башлай. Әлбиттә, тәртипле булыу яҡшы эш. Тик, нисек кенә теләһәк тә, малай тәбиғәте менән малай булып ҡала: ағасҡа үрмәләй, ямғырҙан һуң бысраҡҡа инеп китә, рогатка, уҡ яһай, ниҙер юна, ҡаға һ.б. Быға ул ғәйепле түгел. Киреһенсә, ғәйеп беҙҙәлер: ата-бабаларыбыҙ һымаҡ, 5 йәше тулғас та уны ат башына ултыртмағанбыҙ, көс талап иткән уйындар өйрәтмәгәнбеҙ, ҡырҙа йөрөп, арытып алып ҡайтмайбыҙ, кескенә балта, сүкеш алып бирмәйбеҙ... Ҡыҫҡаһы, малайҙарҙы ир тәрбиәһенән мәхрүм иткәнбеҙ. Нәҡ ошо ир тәрбиәһе бирмәү уның күңел тырыҙы бушлығын ҡатын-ҡыҙ тәрбиәһенең емештәре менән тултыра ла. Етмәһә, ир ғаиләлә аҡса табыусыға ғына әйләнеп бара, көндәлек мәшәҡәттәр менән булып, тәрбиә эшенән ситтә тора. Һөҙөмтәлә, малай буласаҡ кәләшен дә әсәһе һымаҡ күҙаллай башлай, әсәһенә оҡшағанын эҙләй, һайлана. Өйләнгәс инде, уның ғаиләлә үҙ һүҙе булмай, әсәһен тыңлаған һымаҡ, ҡатыны һүҙенән сыҡмай. Тик шуныһы — әсәһе кеүекте ул бер ҡасан да таба алмаясаҡ, сөнки ҡатын — тәү сиратта тормош иптәше, балаларының әсәһе. Әйткәндәй, әсәһе хәмер эсһә, балаһын тәрбиәләмәһә, ят ирҙәр менән сыуалһа, балала гүзәл затҡа ҡарата кире фекер ҙә уяна. Уға бар ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бер үк булып тойола башлай. Етмәһә, тиңдәш ҡыҙҙары тәмәке тартҡан, рюмка дуҫына әүерелгән булһалар, гүзәл затҡа ҡарата бөтөнләй аллергия тыуыуы мөмкин. Шуларҙы күреп-татып үҫкән малай һуңынан өйләнмәүҙе хуп күреүсән.

Малайҙарға ҡатын-ҡыҙ тәрбиәһе биреү, моғайын, динде бөтөргәс тә башланғандыр. Шул саҡта ҡыҙҙар менән малайҙарҙы бергә уҡытыу китте, ҡатындарға лом, балға тоттороп төрлө «удар» төҙөлөштәргә ебәрҙеләр, ул заман идеологияһынса әйтһәк, «ир менән ҡатын-ҡыҙҙың араһында айырмалыҡ бөтөрөлдө». Нисек кенә сәйер, тупаҫыраҡ яңғырамаһын, ысынлап та, хәҙер ул ай-

ырма тик кейемдәрҙә, енси органдарҙа ғына ҡалғандыр.

Нисек кенә булмаһын, малайҙарға ҡыҙҙар тәрбиәһе бирергә, уларҙы «ҡыҙҙар һымаҡ аҡыллы» итергә тырышыу киләсәктә халҡыбыҙҙы фажиғәгә килтереүе ихтимал. Ир һүҙен әйтә алған ирҙәр булмағанда халыҡтың киләсәге юҡ. Әле буйҙаҡ йөрөгән ир-егеттәр артыуының төп сәбәптәренең береһе лә — малайҙарға нәҡ ошо тәрбиәне бирмәү, уларҙы ғаилә башлығы, ғаилә ҡалҡаны итеп әҙерләмәү ул.

Яҙғандарҙың кереһе — ҡыҙҙар яҙмышы. Уларҙы таш диуарҙар йота, тәбиғилеген сикләй, яһалма ҡоршауҙар эсенә бикләй.

### Үткәндәрҙе һағыныу

Беҙҙең тағы бер ауырыу бар: нимәгәлер сат йәбешеп ятыу, яңылыҡтарҙы һағайып ҡабул итеү һәм, һуңлап булһа ла аңлаһаҡ та, инде бүтәндәр күптән тапаған юлдан һәлмәк кенә ҡуҙғалыу. Башҡорттоң күпселеге ауылда йәшәй. Ер кешеләре. Тимәк, колхозсылар. Бәлә ана шунда ла, халыҡтың һаман колхоз системаһына сат йәбешеп ятыуында. Тирә-яҡта фермерлыҡҡа, айырым крәҫтиән хужалығы төҙөүгә дәррәү тотоналар, өйрәнәләр, ә беҙ...

2001 йылдың февралендә республика агросәнғәт комплексы эшсәндәренең кәңәшмәһе булды. Асылы — «ауылдарҙы тик реформалар ғына ҡотҡарасаҡ». Һәр хәлдә, ошоға ҡайтып ҡалды. Әлбиттә, урындарҙа һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне: бығаса өҫтән генә ҡушҡанды үтәп йөрөгән хужалар (был осраҡта ла инициатива юғарынан булды бит) «реформалар» башланы, йәғни тағы ла, 92-93-сө йылдарҙағыса, крәҫтиән хужалыҡтары берләшмәләре, ассоциациялар, кооперативтар төҙөргә тотондо. Дөрөҫөрәге, ошо уҡ колхоз системаһын һаҡлап, «рәйес» һүҙен «директор»ға, «бригадир»ҙарҙы «управ»тарға һәм башҡа шундай исем үҙгәртеүгә эстафета алдылар.

Ләкин ысын реформаларҙы һәр ваҡыт киләһе көндәргә ҡалдырып килеү ҙә дөрөҫ түгел. Кеше үҙе өсөн эшләргә, бай йәшәргә, ирекле баҙар шарттарында алыш-биреш итергә, дәүләтебеҙҙе нығытыуға шәхси өлөшөн индерергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта күпме индергәненең дә белергә хаҡлы. Тоталитар үҙәккә ҡоролған колхоз системаһы, ҡағыҙҙағы «үҙгәртелгән» хужалыҡтар бынан алыҫ тороуын күптән аңларға ваҡыт.

Ҡулына власть туплап өлгөргән колхоз рәйестәре «ассоциация»ларҙы, берләшмәләрҙе тик халыҡты тарҡатмау, ерҙәрҙе бүлеп бирмәү өсөн генә «булдыра», исем алыштыра. Крәҫтиән ғүмер буйы милексе булған, уның ҡанына ошо һеңгән, һәм милекте өлөшләтә уға бирмәйенсә тороп, хужалыҡ итеүгә ҡарашы үҙгәрмәйәсәк, ер эшенә бар күңелен бирмәйәсәк. Шунан һуң, дөйөм хужалыҡ «картотека»ла ултырған саҡта, төрлө «берләшмәләр» — халыҡты алдау ғына.

Республика хужалыҡтарының 31 проценты (100-ҙән 31-е!) артта һөйрәлгәндә, халҡы эш хаҡы күрмәгәндә, ҡағыҙҙағы «кооператив», «ассоциациялар» ҡотҡарыу «һаламы» түгел. Сөнки уларҙың эш алымы бер — өҫтән ҡушҡанды үтәү. Халыҡты үҙенә эшләргә өйрәтеүҙең берҙән-бер юлы — шәхси хужалыҡтарҙы тағы ла үҫтереү, уларға матди ярҙам күрһәтеү һәм етештергән продукцияһын һатып алыуҙы көйләү. Шулай уҡ шәхси хужалыҡтарҙы үҫтереүгә ҡаралған өс гектарға тиклем ерҙе лә көсләп (һыҙыҡ өҫтөнә алам — көсләп) биреү мотлаҡ. Эшкәртә ала икән, крәҫтиән, фермер хужалыҡтары төҙөргә рөхсәт бир, юҡ икән — ошо ере лә етер. Техника менән тәьмин итеүгә килгәндә, мини-тракторҙарҙы килешеү, кредит буйынса биреүҙән тыш, МТС формаһы ла ҡулай. Бының отошло булыуын һуңғы йылдар күрһәтте лә инде. Ә хәҙергесә «кооператив»тарға, «ассоциациялар»ға килгәндә, ул бер системанан икенсеһенә һығылмалы күсеү звеноһы ғына булырға тейеш ине. Шуныһын аңлау мөһим: колхоз системаһы менән коллектив хужалыҡ итеү тәү ҡарашҡа бер үк нәмәне аңлатһа ла, икеһе ике нәмә. Айырым крәҫтиән хужалыҡтарында ла бит ер эшен береһе лә яңғыҙ башҡармаясаҡ — тигеҙ хоҡуҡта булып, крәҫтиәндәр бер-береһенә ярҙам итешәсәк, берләшәсәк. Ә колхоз системаһында эшләгәндәр тапҡанына туранан-тура үҙе хужа түгел, уның елкәһендә ҡабартылған штат, машина артынан машина алмаштырыусы түрәләр һ.б. тора. Ошонда республика Президенты Мортаза

Рәхимовтың БР Министрҙар Кабинетының киңәйтелгән ултырышында (1 февраль, 2001 йыл) һөйләгән сығышынан өҙөк килтереү бик урынлы булыр ине: «Ошо йылдың башына республика агросәнәғәт комплексының кредиторҙар, поставкалаусылар алдындағы бурысы 18,5 миллиард һум, шул иҫәптән республика ҡаҙнаһы алдында 2,4 миллиард һум тәшкил итә. Финанслауҙың бөтә сығанаҡтары буйынса ауылға 3 миллиард 472 миллион һум аҡса бүленде, ләкин республика хужалыҡтарының 31 проценты йылды зыян күреп тамамланы. Ауыл хеҙмәткәрҙәре алдында эш хаҡы буйынса бурыс ҙур, ауыл хужалығы техникаһын һатып алыу кәмене... Һәр колхоз етәксеһенең «Волга»һы бар — машина алалар, ә техника алырға теләмәйҙәр! «Волга» өсөн киткән аҡсаға өс трактор алырға мөмкин...»

Колхоз яҡлылар йыш ҡына халыҡты: «Колхоздар, үҙҙәре ниндәй генә ауыр хәлдә булмаһын, ауылдың социаль инфраструктураһын һаҡлаусы берҙән-бер терәк булып тора», — тип йыуата. Йәнәһе, колхоздар булмаһа, юл да төҙөлмәйәсәк, газ да үтмәйәсәк. Шуныһы, хужалыҡтарҙың күп рәйестәре республика хөкүмәте, президент кимәлендә хәл ителгән, республика бюджеты иҫәбенә башҡарылған эштәрҙе үҙҙәренең ҡаҙаныштары тип күрһәтергә оҫтарып китте. Булдыҡһыҙлыҡтарын, киреһенсә, «бар республикала, илдә шулай булғас» һымаҡ һүҙҙәр менән аҡлай. Халыҡ ышана. Сөнки уларҙың ҡанына «өҫтәгеләргә нығыраҡ күренә» тигән «код» һеңдерелгән. «Колхоз таралһа, баярға, алпауытҡа баш эйәсәкбеҙ», тигәндәрен дә ишеткән бар. Ләкин ҡайһы бер хужалыҡ етәкселәренең әллә ҡасан теләһә ниндәй баярҙан да уҙҙырып ебәргәндәре баштарына ла инеп сыҡмай. Бик һирәк кенә колхоздарҙа рәйес ғүмер буйы ил, халыҡ тип эшләй. Нәҡ ана шуларҙың хужалыҡтары көслө һанала ла. Ғәҙәттә, рәйестәр алышынып тора: береһе килеп байыға ла, икенсеһенә урынын ҡалдыра. Уның ҡарауы, колхозсы шул уҡ: олатаһы ла бил бөккән, балаһы ла, ейәне лә. Иң аяныслыһы, хәҙер был ҡоршауҙың ни икәнен аңламаһаҡ, ейәненең балаһына ла улар яҙмышы төшәсәк. Әйткәндәй, 1861 йылда асылда ҡоллоҡҡа тиң булған «крепостное право» бөтөрөлгәс тә, крәҫтиәндәр батшаға «Баярһыҙ беҙ ни эшләйбеҙ?» тип хат яҙған ти. Сөнки уның менән эшләүе еңел: татлы ризыҡ ашамаһа ла, тамаҡ туҡ, кейем ямаулы булһа ла, өҫ бөтөн, иртәгәһе көнөн дә ҡайғыртырға түгел — баяр уйлар һ.б. Бына колхоз ошо уҡ системаның заманса сағылышы инде.

Ә социаль инфраструктураға килгәндә, һәр кем шәхси, крәҫтиән хужалығынан табышты ни тиклем күберәк алған һайын, шул тиклем бюджет та тулыланыр. Сит илдә ғүмер буйы колхоз булмаған, әммә береһе лә юлһыҙ ҙа, газһыҙ ҙа тормай. Ғөмүмән, кешелектең дөйөм ҡаҙаныштарын бер колхозға, совет власына ҡайтарып ҡалдырыуҙан арынырға кәрәктер инде.

Бөгөн төп бурыс — кешене үҙаллы эшләргә, табышын баҙар шарттарына ярашлы ҡуллана белергә, үҙ еренә хужа булырға өйрәтеү. Уның бер нисә сәбәбе бар. Тәүгеһенә яуап таптыҡ шикелле: дөйөм Рәсәй Федерацияһында эре хужалыҡтар тарҡалып, ер крәҫтиәндәргә күсә барған осорҙа беҙҙә генә колхоз системаһы йәшәй алмаясаҡ, тимәк, теләйбеҙме-юҡмы, уны көсләп һаҡлап тороу халҡыбыҙҙы күрә-тора көрсөккә илтеүгә тиң.

Икенсе, мөһимерәк сәбәп: илдә 1994 йылдан башлап ерҙе һатыу-һатып алыу мәсьәләһе күтәрелеүе. Һуңғы ваҡыт Кремлдә лә, депутат фракцияларында ла ул бик ҙур бәхәс тыуҙыра, законды ҡабул итеүгә табан анығ эштәр башҡарыла. Эйе, Башҡортостан халҡы 1995 йылдың 17 декабрендә — Рәсәй Дәүләт Думаһына һайлауҙар һәм референдум көнөндә — «Башҡортостан Республикаһында ер сикләүһеҙ һатып алыу-һатыу объекты булырға тейешме?» тигән һорауға ҡәтғи рәүештә «Юҡ!» тип яуап бирҙе. Ләкин шуныһын онотorға ярамай, ул саҡта Мәскәүҙә лә был мәсьәлә буйынса һүҙ йыш сурытылмай, элекке автономияларҙың «суверенитетты күпме йота ала, шул тиклем йотҡан» сағы ине. Хәҙер иһә хәл бөтөнләй башҡа: үҙебеҙ ҙә һиҙмәй ҡалдыҡ — Волга буйы федераль округына индек, власыбыҙ «вертикаль»ләште, һалымды «умырып» алып китәләр, Конституциябыҙҙы, закондарыбыҙҙы «норма»ға килтерәләр. Ҡыҫҡаһы, хәҙер үҙәк «провинциялар» менән бик иҫәпләшмәйәсәк: губерналарҙы —

«айырым кенәзлектәр»ҙе бер ҡул аҫтына туплау менән, сират «суверенлы» республикаларға китәсәк. Миҫал эҙләп оҙаҡ аҙапланырға кәрәкмәй — Чечняла ҡан ҡойош бара, Яҡут-Сахала ике республика гражданлығы институты бөтөрөлдө. Бер кем дә киләсәктә Федераль килешеүҙең юҡҡа сығарылып, «ҡағыҙ киҫәге»нә әйләнәсәгенә гарантия бирә алмай. Сөнки бөгөн үк бар йүнәлеш федерация файҙаһына түгел, ә үҙәкте нығытыуға, уға сикһеҙ власть биреүгә йүнәлтелгән. Был йәһәттән агросәнәғәт тармағы ғына ситтә ҡалмаҫ. Үҙәктәге төрлө даирәләге партияларға ла, депутаттарға ла Башҡортостан халҡының ихтыяры бер ни тормауы мөмкин. Тимәк, беҙҙә лә ер яйлап эшсән кешенең ҡулына күсә барырға тейеш. Ә эшләй алған крәҫтиәндән юридик документ менән бүленеп бирелгән ерен береһе лә тартып алмаясаҡ. Шул саҡта ғына етәкселәр ҙә хеҙмәтсәндәр менән иҫәпләшергә, улар алдында отчет тоторға мәжбүр буласаҡ.

Ҡайһы саҡта уҡыусыларҙан, абруйлы ғалимдарҙан: «Аҫабалыҡты тергеҙергә кәрәк», тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. Юҡ менән булашмайыҡ, халыҡтың башын ҡайғыртмайыҡ, тим ундайҙарға. Асылда иһә аҫабалыҡ бар беҙҙең закондарыбыҙҙа, тик күҙҙе асып ҡына ҡарап, аңлай ғына белергә кәрәк. Яуапты табыр өсөн «Башҡорт ССР-ында крәҫтиән (фермер) хужалығы тураһында», «Башҡорт ССР-ында ер реформаһы тураһында» закондарыбыҙға (21 март, 1991й.), БССР-ҙың Ер кодексына (22 март, 1991 й.), уларға өҫтәмәләргә, үҙгәрештәргә («Известия Башкортостана», 22 март, 1999 й.) ҡарау ҙа етә. Ошоларҙы файҙаланһаң, элекке 40 дисәтинә түгел, 50, хатта унан да күберәк ер ал да — рәхим ит, эшлә генә.

Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы граждандары ерҙе ғүмерлек (мираҫҡа ла ҡалдыра алыу хоҡуғы менән), даими (срокһыҙ) файҙаланырға һәм ваҡытлыса (арендаға) алырға хоҡуҡлы. Әлеге мәлдә Рәсәй Федерацияһында ерҙе һатыу-һатып алыу буйынса айырым закон әҙерләнә. Әйткәндәй, Татарстан ошоға оҡшаш ҡанунды 1998 йылда ҡабул итеп, бөгөнгө көнгә биләмәләренең һәр гектарына тиклем «бүлгеләнеп», «хаҡы» ҡуйылып бөткән. Был турала ОРТ каналы 21 февралдә белдерҙе. Һарытау өлкәһендә иһә 1997 йылда уҡ унның буйынса шаулай башлап, өлкә кимәлендә закон ҡабул иттеләр. «Известия» (22 октябрь, 1997 й.) ул турала тәүгеләрҙән булып хәбәр итһә, 1998 йылдың 6 мартында инде өс сутый ерҙең аукционда 31 мең һумға һатылыуы хаҡында яҙып сыҡҡайны. «Рәсәй Федерацияһының 14 субъектында урындағы закондар бөгөнгө көнгә саҡлы ерҙе «реформа» үткән колхоздарында хатта ауыл эшселәренә лә шәхси милеккә алыуға хоҡуҡ бирмәй», — тип яҙҙы гәзит.

Башҡортостанда ер участкалары түбәндәге маҡсатта бушлай бирелә:

а) шәхси торлаҡ төҙөү һәм шәхси хужалыҡ итеү өсөн;

б) коллектив баҡсалар өсөн;

в) дача кооперативтарына;

г) гараж һалыр өсөн;

д) закон тарафынан ҡаралған башҡа осраҡтарҙа.

Ерҙе икенсегә ошо уҡ маҡсаттарҙа биреү тыйыла.

Ер участкалары бүлеү нормаһы мираҫҡа биреү йәки шәхси милекселек хоҡуғы менән:

а) шәхси хужалыҡ алып барыу өсөн — 3 гектарға саҡлы;

б) баҡсасылыҡҡа — 0,15 гектар;

в) торлаҡ, гараж йәки дача төҙөүгә — проект-техник документ буйынса.

Шулай уҡ Башҡортостан граждандары ғүмерлеккә, мираҫҡа ҡалдырыу хоҡуғы менән 50 гектарға саҡлы ерҙе (район нормаһына ярашлы) крәҫтиән (фермер) хужалығы ойоштороу өсөн дә ала. Ошо уҡ маҡсатта ер республикала аренда ысулы менән дә бирелә, был сағында унын майҙаны сикләнмәй.

Үткәндәрҙе һағыныу сире бер заман үтер, тик һауығыуҙы тиҙләтеү мөһим. Ә үҙаллы эшләргә өйрәнеүҙең төп майҙаны — шәхси хужалыҡ.

Кеше әсе тиренең, йоҡоһоҙ төнөнөң, сарыф ителгән сәләмәтлегенең емешен күрергә тейеш. Ошо емеш уны һәм ғаиләһен тулыһынса тәьмин итерлек, балаларын үҫтереп, уҡытырлыҡ булыуы мөһим. Был йәһәттән йыш ҡына Чечняны иҫкә алам. Унда булған саҡта ике йыл буйы һуғыш барған, өйҙәре емерелгән, эш хаҡы, пенсия түләнмәгәненә лә хан заман ине. Шуныһы аптыратты: емерек өй эргә-



04.2002 2 ÷àñòü.p65 169 29.07.02, 17:42

һендә яңыһына нигеҙ һалына башлаған, халыҡ ауыҙынан зарланыу һүҙен ишетмәҫһең, йөҙҙәрендә төшөнкөлөк юҡ. Өйҙәренә инһәң — өҫтәл тулы ризыҡ. Нилектән был? Бар ғилле — шәхси хужалыҡтары менән йәшәүҙәрендә, дәү-дәү баҙҙарында кәмендә ике-өс йыллыҡ ризыҡтары булыуҙа, һәм беҙҙең һымаҡ ғүмер буйы «колхозыбыҙҙыҡы булһа — беҙ ҙә үлмәбеҙ» тип йәшәмәүҙәрендә.

Беҙҙән айырмалы рәүештә, ире, ҡатыны, хатта балалары дөйөм хужалыҡ эшенә егелмәгән. Ир колхозда эшләһә, ҡатын менән балалары — шәхси хужалыҡта, үҙ ғаиләһе өсөн тир түгә. Ошондай уҡ миҫалды эстондарҙан килтерер инем. Уларҙа ла колхоз системаһын индереп ҡарағандар. Тик бер-береһен һатмаған, «раскулачивание»ға бирмәгән, бер-береһе өсөн үлеп барған халыҡҡа ҡамыт кейҙерә алмағандар. Уның ҡарауы, бөгөн мул тормошта йәшәйҙәр. Әгәр ҙә беҙҙә машина алыу байлыҡҡа һаналһа, Балтик буйы илдәрендә ул хәжәткә тиң.

Ниңә әллә ҡайҙа китергә? Әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең йәшәү кимәлен Башҡортостан буйынса булһа ла сағыштырып ҡарайыҡ. Әйтәйек, 100 башҡорт ғаиләһенең 22,8 процентының шәхси машинаһы булһа, урыҫтарҙың — 34,3, татарҙарҙың 29,7 процентыныҡы бар. Дөйөм ятаҡтарҙа ошо уҡ һанға 8,5 процент башҡорт йәшәһә, урыҫтар — 3,8, татарҙар — 5,7 (Р.Ирназаров, «Равенство этносов в БР».) Был нимәнән шулай һуң? Ҡайһы бер ағай-эне уйлағанса, башҡортто үҙ республикаһында ҡыҫалармы? Юҡ! Был башҡорт райондарында етештереү сәнәғәтенең булмауынан, йәғни колхоз, совхоздарҙа бил бөгөүсе халыҡтың осһоҙ сеймал етештереүсе булыуынан ғына килә. Хәйбулла, Әбйәлил, Йылайыр, Ейәнсура һ.б. райондарҙа командировкала булған саҡта иҫ китә — һауған һөттәрен әллә ҡайҙарға илтергә, үҫтергән игендәрен, булған иттәрен теләһә ҡайҙа осһоҙ хаҡҡа оҙатырға ризалар. Ҡайһы бер етәкселәр хатта былай тип ебәрә: «Элегерәк рәхәт булды, бөтәһен дә ҡырып, һепереп алып китәләр, ҡайғы белмәй инек...» Халыҡтың насар йәшәүенең тағы бер сәбәбе: райондарҙың иҫ киткес эре булыуы. Ҡайҙа ҙур территориялы район, шунда — ҙур хужалыҡтар, шунда — халыҡтың ярлылығы. Ҡайҙа етештереү тармаҡтары юҡ, шунда киләсәктә лә теүәл фән белгестәре, етәксе кадрҙар үҫмәйәсәк. Тимәк, артабан да урындағы халыҡ менән ситтән килеүселәр етәкселек итәсәк, тимәк, артабан да был төбәктәр осһоҙ сеймал етештереүсе генә булып ҡаласаҡ.

Бөгөн үҙаллы эшләргә өйрәнергә теләмәүебеҙ киләсәктә бик ауыр, ғәфү итмәҫлек һөҙөмтәләргә килтереүе мөмкин. Ата-бабалар меңәр йылдар буйы ҡан ҡойған еребеҙҙән бөтөнләйгә тороп ҡалыуыбыҙ бар.

Башҡорттоң тарихы данлы ла, ҡанлы ла. Тик ул тарихта әлегә беҙҙең өлөшөбөҙ юҡ! Беҙгә бөгөн шул өлөштө тултырырға форсат бирелгән — ғаиләбеҙҙе, тотош алғанда, халҡыбыҙҙы бөлгөнлөктән алып ҡалыу. Балаларыбыҙҙы етеш тормошта үҫтереп, уҡытып кеше итһәк кенә беҙ тарихҡа тамсылай үҙ өлөшөбөҙҙө өҫтәрбеҙ... Әлегә беҙҙең — ир-егеттәрҙең — алдына бер генә маҡсат ҡуйылған — Ир булып ҡалыу, һөйгәндәребеҙгә ҡосағыбыҙҙың ҡайнарлығын йәлләмәү, сабыйҙарыбыҙға эштән һөйәлләнгән ҡулдарыбыҙҙың йомшаҡлығын тойҙортоу, гендарҙа тығарылған атты эйәрләү, үҙебеҙҙең ерҙә иртәгәһе көнөбөҙгә ныҡлы нигеҙ һалыу... Ир булып ҡалайыҡ! Ә дөйөм алғанда, телгә алынған үә алынмаған кәмселектәрҙән арыныу дауаһы, тимәк, халҡыбыҙҙың яҙмышы — үҙебеҙҙең ҡулда. Йәндәребеҙгә инеп оялаған аҡланыу, зарланыу, урын таба башлаған көнләшеү һымаҡ насар ғәҙәттәрҙе алып ырғыта алһаҡ, шик-шөбһәләр ҙә, ҡоллоҡ ғәләмәттәре лә юғалыр. Рух таҙарһа, эскелек, наркомания, токсикомания ла йоҡмаҫ. Инештәребеҙгә ҡайтһаҡ, демографик хәл дә ҡырҡыулашмаҫ. Һәр хәлдә, һуңғыһы өлкәһендә республика етәкселәре ҡулынан килгәнен эшләй, ҡалғаны үҙебеҙҙән тора.